# ЭҘЛӘНЕҮҘӘР ИЛТӘ ТАБЫШҠА



*Йәйҙең иң матур көндәрендә шаулап-гөрләп үткән королтай делегаттары, ҡунаҡтар өсөн бик матур, бик күркәм мәҙәни программалар әҙерләнгәйне. Ә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында күрһәтелгән концерт номерҙарын һоҡланмай ҡарау мөмкин түгел ине. Әле һүҙебеҙ ошо тамашаны биҙәгән өр-яңы бер бейеү хаҡында. Был бейеүҙе Ф.Гәскәров исемендәге Башҡорт дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле башҡарҙы. Әлегә «Саптар» тип атала ул. Ҡуйыусыһы — ансамблдең художество етәксеһе, Башҡортостан Республикаһының С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ артисы **Риф Фәтих улы Ғәбитов**. Тамашасылар, оло йыйын ҡунаҡтары бик ихлас ҡабул итте был бейеүҙе. Алҡыш тауыштары оҙаҡ тынманы. Ғөмүмән, ул бер бейеү генә лә түгел: Риф Ғәбитов ошо номер менән башҡорт бейеү сәнғәтендә бер яңы, ҙур ҡатлам, хатта яңы дәүер асҡандыр. Бығаса күрелмәгән, бығаса булмаған ғәжәйеп тамашаның авторы Риф Ғәбитов менән әңгәмәбеҙ ошо хаҡта.*

**— Риф Фәтихович, һеҙҙең өр-яңы бейеүегеҙ II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы программаһындағы бейеүҙәр араһында үҙе бер ҙур яңылыҡ, ысын сенсация һымаҡ ҡабул ителде. Бейеүҙең ҡуйылыу тарихы ниндәйерәк?**

— Дөрөҫөн әйткәндә, был бейеү киләсәктә атҡарыласаҡ ҙур эштең бер өлөшө, башланғысы ғына. Киләсәктә бер бейеү менән генә сикләнмәй, ошо стилдәге бейеүҙәрҙән иң кәмендә сәғәт ярымлыҡ ҙур шоу-спектакль эшләргә ниәт бар. Әле был үҙебеҙҙең көстө, хәлде, ансамблдең әҙерлеген һынап, ҡапшап ҡарау өсөн ҡуйылған тамаша, тиер инем. Ошо бейеү аша белгестәрҙең, коллегаларымдың, ниһайәт, талапсан тамашасыларҙың фекерен белеү ҙә мөһим ине. Әле бына концерттан һуң бик күп ыңғай фекерҙәр, хуплау һүҙҙәре ишетеү ижади ышанысты тағы ла нығытты, дәрт өҫтәне. Тимәк, үҙебеҙҙең эҙләнеүҙәрҙә дөрөҫ юлдан барабыҙ. Сөнки был бейеүҙә ҡулланылған хореографик яңылыҡтар, яңы композицион алымдар, яңы стилдәге музыканың ыңғай баһа алыуы артабанғы аҙымдарға, асыштарға этәргес көс булыр тип уйлайым. Сөнки ул баһаны беҙгә ҡоролтай делегаттары — башҡорт милләтенең күре-



некле шәхестәре, шул иҫәптән музыка, фольклор, тарих, әҙәбиәт өлкәһендәге иң абруйлы белгестәр бирҙе. Хәҙер инде беҙ хаҡлы рәүештә ошо алынған йүнәлеш дөрөҫ тип иҫәпләйбеҙ.

**— Был бейеү быға тиклемге бейеү традицияларына һыйыышып та бөтмәй. Унда башҡорт бейеү сәнғәтенең бик тә боронғо бер ҡатламы яңынан асыла төҫлө. Айырыуса был бейеүҙәге хәрәкәттәр Үҙәк Башҡортостандың хәҙер инде тамам онотолоп тиерлек бөткән бейеү хәрәкәттәренә яҡын. Был һеҙҙең бик ҙур, әһәмиәтле асышығыҙ. Ошо табышҡа нисек юлыҡтығыҙ?**

— Әлбиттә, был әле генә, бөгөн килеп осраҡлы рәүештә табылған нәмә түгел. Ғүмер буйы башҡорт халыҡ бейеүҙәре менән эш иткәс, мин һәр ваҡыт халыҡ ижадына мөрәжәғәт итәм. Был бик үҙенсәлекле, башҡаларҙан ныҡ айырылып торған бейеүҙең нигеҙендә лә халыҡ ижады ята. Иң элек бейеүгә халҡыбыҙҙың «Саптар юрға» тигән көйө этәргес булды. Көйҙөң бик үҙенсәлекле, тарих төпкөлдәренән, бик боронғо дәүерҙәрҙән килгән динамикаһымы, энергияһымы күңелгә ныҡ тәьҫир итте. Ошо көй нигеҙендә буласаҡ бейеүҙең драматургияһы хасилланды. Тамашасыны бейеүҙәге дәрт, нәфислек йәлеп итһә, автор өсөн уның драматургияһы мөһим. Һәр тамаша кеүек, бейеүҙең дә үҙ композицияһы — инеш өлөшө, төйөнләнеше, иң көслө кульминацион нөктәһе һәм сиселеш мәле була. Әлбиттә, бөтә тамашасылар ҙа мин бейеүгә һалған мәғәнәне тулыһынса минеңсә аңларға тейеш тип иҫәпләмәйем. Автор булараҡ, мин унда төрлө алымдар, төрлө элементтар файҙалана алам. Бейеүҙең нигеҙе, драматургияһы әҙер булғас ҡына мин музыканттар, костюм оҫталары менән эшләй башлайым, сөнки шунһыҙ улар минең идеяға яҡынлаша алмаясаҡ, мине аңламаясаҡ.

Бейеүҙең сюжеты былай: башҡорт халҡы борон-борондан ғүмер буйы тормошон ат менән бәйләгән. Уның өсөн ат — яуҙа яуҙаш, юлда юлдаш, эштә алыштырғыһыҙ ярҙамсы изге йән һаналған. Ашаған ашы ла, эскән ризығы ла аттан: йылҡы ите лә ҡымыҙ.

Шуға күрә халыҡ ижадында ат менән бәйле йырҙар, экиәттәр, легендалар бик күп. Хәтергә төшөрәйек: Аҡбуҙат, Күк толпар һ.б. Бейеү сәнғәтенең ат менән оҡшаш сифаттарҙы үҙ итеүе һис тә ғәжәп түгел. Беҙҙең бейеүҙәрҙең бик күп хәрәкәттәрендә йылҡы малына хас элементтар осрай. Аяҡты юғары күтәреп, төрлөсә уйнаҡлатып, һикергеләп тыпырҙатып бейеү үҙе генә лә быны раҫлай. Танылған бейеүсе һәм сәнғәт белгесе Л.Нагаева раҫлауынса шулай. Мин үҙем дә шуға инанам. Ғөмүмән, бейеү сәнғәтендә бындай оҡшашлыҡтар байтаҡ. Әйтәйек, башҡорт егеттәренең бейеүҙәге ғорур ҡиәфәттәре, баштарын сөйөп тотоуы ла ошо аттар мөхитенән күскән. Башҡа халыҡтарҙа ла ошо нигеҙҙә тыуған бейеүҙәр бар.

Мин үҙем дә бейеүҙе ҡуйғанда аттар тормошонан алынған һыҙаттар менән эш иттем. Бына, бейеү башланғанда өйөр айғыры үҙенең һөйгәнe — бейәһе менән яланда

үлән утлап йөрөй. Икеһенең дә күркәм ялдарын назлап иҫкән ел ыңғайына бейәнең муйындарын иркәләй. Мөһабәт өйөр айғыры шулай аңлата үҙенең сикһеҙ мөхәббәтен бейәгә, икәүләшеп һөйөү даръяһында йөҙә улар.

Ситтәрәк — өйөр йөрөй. Шул мәл өйөрҙә ниндәйҙер ығы-зығы ҡуба. Әлегәсә баш бағып йөрөгән йәш-елкенсәк бығаса өйөрҙө әйҙәп йөрөгән айғырға шик белдерә: йәнәһе ул ҡартайған, киләсәктә өйөрҙө бәлә-ҡазанан, бүреләрҙән һаҡлай алырмы? Дәрт-дарманы ла самалы, тиҙәр улар. Тоғро дуҫы — бейә иһә айғырҙы яҡлай. Асылда бейә бында власты һынландыра. Шуға ла өйөрҙәге йәш-елкенсәк (солист) иң элек бейәне арбарға ынтыла: йәнәһе, мин айғырға ҡарағанда йәш, дәртле, көслө, мин һине нығыраҡ яратам, тигәнде бейеүҙә һынландыра.

Әммә тәбиғәт ҡанундарына ҡаршы барыу мөмкин түгел: элек-электән иң көслө, иң абруйлы ат өйөрҙө етәкләгән. Шуға күрә бында өйөр айғыры үҙ һүҙен әйтә: бейә — минеке, мин әле ҡартаймағанмын, дәрт-дарманым да етерлек. Өйөр ҙә уны аңлай: бына улар бергәләп, ялдарын елдә елберҙәтеп, дала буйлап сабып китәләр.

Шуны әйтергә кәрәк, был бейеүҙең төп элементы — бик ҡатмарлы аяҡ хәрәкәттәре һәм тыпырҙатыу (дроби). Әммә ул башҡа бейеүҙәрҙәкенән айырыла. Шуға күрә бейеүселәргә уны өр-яңынан өйрәнергә тура килде. Мин быны тергеҙелгән халыҡ бейеүенең яңыса кәүҙәләнешенең бер өлөшө, тиер инем.

Был бейеүҙе ҡуйғанда мин ирланд Майкл Фидлиҙың өс сәғәтлек бейеү тамашаһын да күҙ уңында тоттом, әммә ул бейеүҙең хәрәкәттәре икенсе төрлөрәк — улар сәхнәлә үҙҙәренсә, ирландса хәрәкәт итә һәм үҙҙәренең милли, ирланд рухын аса. Был программа үҙенең композиция алымдарының ябай, уңайлы булыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә. Минең өсөн бейеүҙә иң мөһиме — рух. Әгәр унда башҡорт рухы сағыла, ярылып ята икән, был — башҡорт бейеүе. Беҙ әле Башҡортостандың бөтә төбәктәренең дә бейеү хәрәкәттәрен үҙебеҙ өсөн саҡ аса, яңы ҡуллана башланыҡ. Әле беҙҙе ул йүнәлештә күп асыштар көтә. Шул иҫәптән музыка өлкәһендә лә.

**— Башҡорт бейеүе традицияларының ошо, тергеҙелгән, реставрацияланған тип әйтәйекме, өлгөһөн һәм өр-яңы һулыш алған был боронғо традицияны ниндәй йүнәлештә үҫтерергә ниәтләйһегеҙ? Мәҫәлән, һеҙ ошо бейеүҙә ҡулланған мотивтарҙа башҡорттарҙың, айырыуса Үҙәк Башҡортостандың инде онотолған буҙ, шөгөр кеүек боронғо музыка ҡоралдары тауыштары ишетелеп, сағылып ҡалған һымаҡ. Моғайын, бейеүҙең көйөн һалғанда профессиональ музыкант та ҡатнашҡандар... Шулай икән, кем һуң ул? Артабан ошо йүнәлештә эште үҫтерергә ниәтләйһегеҙме? Бәлки ошо мотивтар ерлегендә тағы ла яңы бейеүҙәр тыуыр?**

— Музыканың авторы — йәш композитор Азамат Аҙнағолов. Танылған ҡурайсы Роберт Юлдашев менән берлектә ижад итте улар. Был көйҙөң нигеҙендә бик боронғо башҡорт мотивтары ята. Азаматтың әйтеүенсә, уға ошо көйҙө ижад итеү өсөн бик күп тарихи материал уҡырға, эҙләргә тура килгән. Һөҙөмтәлә бейеүҙе байытҡан, режиссерҙың талаптарына яуап биргән бейеү көйө тыуҙы. Унда замансa музыка ҡоралдары ла, боронғо ҡумыҙ, ҡурай, өҙләү ҙә яңғырай. Әлбиттә, киләсәктә башҡа төр музыка ҡоралдарын файҙаланыу ҙа ҡамасауламаҫ, киреһенсә, көйҙө байытыр ғына. Әйтәйек, шул уҡ боронғо, әлеге мәлдә онотолған буҙ, шөгөр моңо ла көйҙө биҙәр ине, ләкин ул инструменттарҙың тергеҙелеүен көтөп булмай. Музыка белгестәре уларҙы тергеҙә, ҡуллана башларға тейеш.

**— Күреүебеҙсә, был бейеүҙең хәрәкәттәре бик тә ҡатмарлы, үҙенсәлекле. Э костюмдар иһә ошо табышты тағы ла байыта. Уларҙың авторы кем? Ул костюм-**

**дар өҫтөндә артабан эшләргә ниәт, теләк юҡмы?**

— Һәр бер яңы, айырыуса бының һымаҡ үҙенсәлекле бейеүгә өр-яңы костюмдар талап ителәэ. Был бейеү өсөн костюмдар әҙерләүҙә миңә рәссам Наталья Степанова ҙур ярҙам күрһәтте. Рәхмәтем ҙур уға. Уның эскиздары буйынса эшләнгән костюмдарҙы Бөтә Рәсәй музыка йәмғиәте комбинатында тектереп алдыҡ. Яңылыҡтар, табыштар байтаҡ. Наташа башҡорт халҡының милли кейем үҙенсәлектәрен үҙенсә ҡулланды. Әйтәйек, ҡатын-ҡыҙҙарҙың яға (һаҡал) элементы үҙе бер яңы асыш төҫлө ҡулланылған. Күлдәк итәктәре лә башҡаса, бейегәндә аттың ялы һымаҡ, уға ҡушылғандай, ялбырап китә.

Аяҡ кейемдәре лә икенсе — ҡата кеүегерәк өр-яңы аяҡ кейеме таптыҡ. Уны мин тарихи нигеҙҙә тыуған, тиер инем. Ике йыл элек, шулай, Белорет районының Зөйәк ауылында һабантуйҙа йөрөгәндә бихисап тирмәләрҙең береһе эргәһендә бер аяҡ кейеме күреп ҡалдым. Һуңынан ауылдағы музейға барып, уның директоры Рәмил Шәймәрҙанов менән осраштым. Бындай ҡатаны элек һунарсылар кейгән икән. Әле бына ошоға оҡшатып яңы бейеүгә матур һәм үҙенсәлекле аяҡ кейеме тектерҙек.

Бейеүселәрҙең баш кейеме лә башҡа. Рәссам Н.Степанованың табышы нигеҙендә көләпәрә һымаҡ баш кейеме тыуҙы.

**— Ошонда үҙемде, башҡа бик күптәрҙе лә ҡыҙыҡһындырған бер һорауҙы бирге килә: һәр бейеүҙе ҡуйғанда эҙләнергә, уны биҙәгән өр-яңы сифаттар табырға кәрәк. Һеҙ ҡуйған бейеүҙәрҙә иһә был табыштар ярылып ята. Мәҫәлән, бейеүҙәрегеҙҙә башҡорттоң һуғышсан, яугирлыҡ традицияларына ла йыш мөрәжәғәт итәһегеҙ. Ошо йүнәлештә эшләгәндә белгестәр тәҡдиме лә ҙур ярҙам күрһәтә алыр ине. Мәҫәлән, башҡорт яугирҙәре кейеменең төп элементтарының береһен — ҡәмәрҙе алайыҡ. Уға алдан, һул яҡтан ҡорман, уң яҡтан янбашҡа табан — бысаҡ тағылған. Бысаҡ күн йәки күн менән көпләнгән ағас ҡынға һалынған, ә ҡын ике ҡайыш менән ҡәмәргә кейҙерелгән һәм горизонталь хәлдә йөрөтөлгән. Ә ҡорман — дүрткел формалағы, янсыҡ рәүешендәге, ҡарышҡа бер ҡарыш күләмендәге, үҙенә күрә бер сумканы хәтерләтә. Билдәле булыуынса, башҡорт кейеме кеҫәһеҙ тегелгән. Ҡорман — төрки һүҙе, урыҫ телендәге «карман» — кеҫә һүҙе шунан. Ошо элементтарҙы — ҡорман һәм матур итеп эшләнгән башҡорт бысағы тағылған ҡәмәр бейеүселәрҙең костюмын артабан камиллаштырыр, милли һыҙаттарын байытыр ине. Ғөмүмән, ундай миҫалдар — бихисап. Һеҙҙең коллектив йыш ҡына донъяның бар тарафтарына, сит илдәргә гастролгә сыға. Шуға күрә башҡорт милли костюмдарын мөмкин тиклем камилыраҡ, матурыраҡ, тулыраҡ итеп күрһәтеү талап ителәэ.**

**Бейеүҙә ҡорал ҡулланыуға килгәндә, «Төньяҡ амурҙары» бейеүендә яугирҙәрҙең ҡылыстарынан осҡан осҡондар тамашаға онотолмаҫ биҙәктәр өҫтәй. Моғайын, ул яңылыҡҡа күптәр иғтибар иткәндер. Бер ыңғайҙан ошо эффектҡа нисек өлгәшеүегеҙҙе лә асып китһәгеҙ ине.**

— Ул ҡылыстарҙы махсус рәүештә Күмертау ҡалаһындағы заводтарҙың береһендә махсус металдан эшләттек. Оҙаҡ ҡына эҙләнергә тура килде. Беҙгә ҡылысты биш төрлө металдан эшләп күрһәттеләр. Инженерҙар бында ҡылыстар бәрелгәндә осҡан осҡондарҙың матурлығын да, ниндәй араға таралыуын да, бейеүселәр өсөн хәүефһеҙлеген дә күҙ уңында тотто. Һөҙөмтәлә — ошондай музыкаль сыңлау, күҙҙәрҙе сағылдырырлыҡ осҡондар сәсрәй. Был — бейеүҙе ҡуйыусының, рәссамдың һәм инженер фекерененең бергә ҡушылыуының гүзәл бер кәүҙәләнеше. Ҡыҫҡаһы, эҙләнергә кәрәк. Бейеүселәребеҙ иһә төрлө өлкә-

ләрҙә эшләгән белгестәрҙең тәҡдимдәренә, табыштарына тик шат ҡына буласаҡ.

**— Һеҙҙең күпселек бейеүҙәрегеҙ халыҡ ижады ерлегендә тыуған: «Еҙ үксә», «Бөркөтостан», «Ҡоралай», «Кәркәүәк», «Көтөүсе моңо» һ.б. Моғайын, һеҙҙең филолог булыуығыҙ ярҙам итәлер?**

— Әлбиттә. Башҡорт дәүләт университетында тарихты, этнографияны, халыҡ ижадын өйрәнеү, уларҙың сығанаҡтарын белеү бик файҙалы. Беҙ уҡыған заманда декан булған В.Прокшин: «Студент уҡыу йылдарында йорттоң бураһын һала, артабан иһә үҙенең ныҡышмалы хеҙмәте менән уны тултыра», ти торғайны. Филолог булараҡ, ҡайҙа нимә ятҡанын, кемгә мөрәжәғәт итергә кәрәклеген беләм, был эште күпкә еңеләйтә.

Киләсәктә, ошо бейеүгә тағы яңыларын өҫтәп, сәғәт ярымлыҡ шоу-программа әҙерләргә ниәт бар. Уны көҙгә, йыл аҙағына атҡарып сығырбыҙ тип уйлайым. Бында әле эшләйһе эштәр күп. Яҡтылыҡ, музыка, яҡшы аппаратура булдырыу ярҙам итәсәк. Ҡоролтай алдынан Нестеров исемендәге музейҙа асылған «Евразия боландары» тигән иҫ киткес күргәҙмәне ҡарарға насип булды. Ғәжәйеп музыкаль әйберҙәр. Ҡыуанысымдың сиге булманы: беҙ бына ниндәй ҙур рухи байлыҡ тыуған ерҙә йәшәйбеҙ! Күпме илһам, күпме көс туплаған улар. Меңәр йылдар элек үк беҙҙең еребеҙҙә шундай кешеләр йәшәгәненә шатландым, ул миндә көс, дәрт, дарман уятты.

Әле бына Татарстан Республикаһына гастролгә барып ҡайтҡас, ял итеп алырға уйлайбыҙ. Арытты. Ял итеү тип тә булмай инде. Ер кендеге Арҡайымға барып ҡайттыҡ. Композиторҙы, рәссамды ла алып барҙым мин унда. Күрһендәр, көс алһындар. Тәбиғәт менән аралашыу илһам өҫтәй бит ул. Мин үҙем һалған бейеүҙәрҙә тәбиғәт һынланышын кәүҙәләндерергә ынтылам. Унда бөтә нәмә гүзәл. Ырыу башлыҡтары итеп элек-электән иң көслө, иң абруйлы кешеләр һайланған. Ул ошо ырыуҙы, ҡәбиләне бәлә-ҡазанан һаҡларлыҡ шәхес булған. Йәнлектәр араһында был йола әле лә һаҡлана. Ә кешеләр, тәбиғәткә ҡаршы сығып, үҙҙәрен ҙур ҡурҡыныстарға, һәләкәттәргә дусар итә. Тәбиғәт ҡанундарын үҙеңә буйһондорорға тырышыу урынһыҙ. Алға үҫеш, хәрәкәт булһын өсөн беҙгә хәҙер лидер кәрәк.

**— Ошо бейеүҙә ҡатнашҡан бейеүселәрҙе лә атап китһәгеҙ ине...**

— Төп персонаж — лидер ролендә Урал Мортазин бейей. Бик талантлы артист. Героиня ролен Юлиә Әхмәтйәнова башҡара. Икенсе, йәш лидер ролендә — солист Руслан Нәбиуллин. Азамат Искәндәров, Марат Яҡупов, Альбина Нуриманова, Ғәлиә Яппаровалар ҙа ҙур оҫталыҡ күрһәтте. Ғөмүмән, бейеүҙе ҡуя башлағанда уҡ бөтә коллектив ҙур ҡыҙыҡһыныу менән эшкә тотондо. Бейеү — коллектив ижад емеше. Ҡайһы бер хәрәкәттәрҙе бейеүселәр үҙҙәре лә тәҡдим итте. Һөҙөмтәлә өр-яңы бейеү тыуҙы. Шуны ла әйтергә кәрәк: һәр бейеү артистарҙан иҫ киткес күп физик көс талап итә. Беҙҙең ансамбль бейеүселәре балет артистарынан кәм эшләмәй күнекмәләрҙе. Уңыш тир түгеп яулана. Эҙләнеүҙәр табышҡа илтә.

**— Һеҙгә, бөтә ансамблгә өр-яңы ижад уңыштары, тамашасыларҙың ихлас һөйөүен һәм көслө алҡыштар теләйбеҙ. Һәм, әлбиттә, Башҡортостан халҡына шундай көслө сәхнә әҫәре, яңы бейеү бүләк иткән бөтә коллективығыҙға — иң оло рәхмәт һүҙҙәре! Яңы әҫәрегеҙ сәхнәлә оҙаҡ йәшәһен, артабан үҫешһен!**

*ЗӨҺРӘ АЛТЫНБАЕВА*
*әңгәмәләште.*